Башҡортостан Республикаһының мәғариф һәм фән министрлығы
Дәүләт бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһы
Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты

«Ҡаралған»
Башҡорт теле һәм әҙәбиәте
уҡытыусыларының МБ ултырышында
«29» август 2023 йыл
------------ Р.М.Тимербулатова

«Килешелгән»
Уҡыу-уҡытыу буйынса
директор урынбаҫары
«_29_» август 2023 йыл
--------------- Л. Х. Шөғәйепова

«Раҫлайым»
Рәми Ғарипов исемендәге
1-се БРГИ директоры
«_29_» август 2023 йыл
-------------И.Р.Сәлихов
Приказ № 463
от 31.08.2023г

# «Мауыҡтырғыс башҡорт теле» исемле
# дәрестән тыш эшмәкәрлектең программаһы

| | |
|---|---|
| Йүнәлеше | Дөйөм интеллектуаль |
| Исеме | Мауыҡтырғыс башҡорт теле |
| Класс | 7 |
| Тормошҡа ашырылыу ваҡыты | 2023-2024 |
| Сәғәттәр һаны | Аҙнаға -1 сәғәт, йылға-34 |
| Уҡытыусыһы | Кайбышева Альбина Хәсән ҡыҙы |

# Аңлатма яҙыу

Дәрестән тыш эшмәкәрлек
программаһы түбәндәге документтарға нигеҙләнеп төҙөлдө:

- Рәсәй Федерацияһының “Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында” федераль законына (29 декабрь, 2012 йыл, № 273- ФЗ);
- Башҡортостан Республикаһының “Башҡортостан Республикаһында мәғариф тураһында” законына (1 июль, 2013 йыл, №696-з);
- *“Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында” Рәсәй Федерацияһы Законына (25 октябрь 1991 йыл, № 1807-1);*
- *“Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында” Башҡортостан Республикаһы Законына (17.03.2003, № 482-з, 28.12.2009, № 192-з.)* ;
- Төп белем биреү дәүләт стандарттарының федераль компонеты (РФ-ның мәғариф һәм фән министрлығы ,05.03.2004 № 1089 (ред. 23.06.2015);

## Башҡорт телен уҡытыу маҡсаттары:

1. Туған телгә ҡарата һөйөү, мәҙәниәт күренеше булараҡ, уға ҡарата аңлы ҡараш тәрбиәләү, туған телдең төп аралашыу, кеше эшмәкәрлегенең төрлө сфераһынан белем алыу ҡоралы булыуын, йәмғиәттә ҡабул ителгән әхлаҡ-этик нормаларҙы үҙләштереү сараһы булыуын аңлау, туған телдең эстетик ҡимммәттәрен үҙләштереү;
2. Көндәлек тормошта һәм уҡыу эшмәкәрлегендә туған телде аралашыу сараһы булараҡ үҙләштереү; үҙ-ара аңлашыу һәм үҙ-ара фекер алышыуға һәләтлелекте үҫтереү; үҙ телмәреңде камиллаштырыу; мөһим төп уҡыу һәм универсаль уҡыу хәрәкәттәре (эшмәкәрлектең маҡсаттарын аныҡ итеп әйтә белеү, уны планлаштырыу, библиографик эҙләнеү үткәреү, төрлө типтағы лингвистик һүҙлектәрҙән һәм сығанаҡтарҙан киң мәғлүмәт саралары һәм Интернеттан тейешле мәғлүмәтте алыу һәм эшкәртеү һ.б.)
3. Тел системаһы төҙөлөшөн һәм уның хәрәкәттә булыу законлығын үҙләштереү, стилистик ресурстарҙы һәи төп әҙәби тел нормаларын күҙәтергә өйрәнеү; анализлау, сағыштырыу, классификациялау һәм тел факттарын баһалау һәләттәрен үҫтереү; яҙма һәм һөйләү телмәрен, телмәр эшмәкәрлеге төрҙәрен, аралашыуҙ9ың төрлө ситуацияларында телде ҡулланыу ҡағиҙәләрен, телмәр этикет нормаларын, актив һәм потенциаль һүҙлек запасын байытыу; телмәрҙә грамматик сараларҙы ҡулланыу күләмен киңәйтеү; белемде, күнекмәне аралашыу процесында уҡыу эшмәкәрлегендә һәм көндәлек тормошта ҡулланыу һәләтлеген камиллаштырыу.

# I. Уҡыу предметына дөйөм характеристика

*Коммуникатив компетенция* телмәр эшмәкәрлегенең төрҙәре, һөйләү һәм яҙма телмәр төрҙәрен үҙләштереүҙе иҫәптә тота, тел материалын һәм күнекмәләрҙе кәрәкле ситуацияларҙа ҡуллана алыуҙы талап итә. Коммуникатив компетенция аралашыуҙың маҡсатын билдәләй, телмәр ситуацияһын баһалай белеүҙе, аралашыусының коммуникация ысулдарын һәм ниәттәрен иҫәпкә алыуҙы, адекват стратегик аралашыуҙы һайлауҙы һәм үҙ телмәреңде аңлы рәүештә үҙгәртеүгә әҙер булыуҙы күҙ уңында тота.

*Тел һәм лингвистик компетенция* йәмғиәт күренеше булараҡ, тел тураһында тейешле белемде үҙләштереү нигеҙендә уның төҙөлөшөн, үҫешен, хәрәкәттә булыуын формалаштырыуҙы аңлата; башҡорт әҙәби теленең төп нормаларын үҙләштереү; һүҙлек запасын һәм уҡыусы телмәренең грамматик төҙөлөшөн байытыу; фән булараҡ лингвистика тураһында тейешле белем, уның төп бүлектәренә кәрәкле булған тел күренешен һәм факттарын анализлау һәм баһалау мөмкинлеген формалаштырыу; төрлө төрҙәге лингвистик һүҙлектәр менән ҡуллана белеү.

*Мәҙәни компетенция* туған телдең мәҙәниәтен сағылдырыусы форма булараҡ аңлауҙы күҙ уңында тота, тел һәм халыҡ тарихының бәйләнештә булыуын, башҡорт теленең милли-мәҙәни үҙенсәлеген, башҡорт телмәр этикеи нормаларын үҙләштереүҙе, халыҡ-ара аралашыу мәҙәниәтен үҙләштереү; милли мәҙәни компонентлы һүҙҙәр мәғәнәһен аңлатыуҙы белдерә.

Башҡорт теле курсының коммуникатив-эшмәкәрлек йүнәлешен көсәйтеү, уны белем алыуҙа метапредмет һөҙөмтәләргә йүнәлтеү кешенең тышҡы мөхиткә тиҙ яраҡлашыу һәләтле һәм унда әүҙем эшмәкәрлекте дауам итергә һәләтле булараҡ, функциональ грамоталылыҡты формалаштырыуҙың мөһим шарттары булып тора.

Функциональ грамоталыҡтың мөһим индикаторы – предмет-ара статус: <u>коммуникатив универсаль уҡыу эшмәкәрлеге</u> (телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәре менән эш итеү, тыңдаштәре һәм оло кешеләр менән аралашыуҙы ҡороу; телдән һәм яҙма телмәрҙе адекват ҡабул итеү; ҡуйылған проблема буйынса үҙ ҡарашыңды теүәл, дөрөҫ, логик яҡтан төҙөк һәм тасуири әйтеп биреү, аралашыу процесында яҙма һәм һөйләү телмәре нормаларын һәм башҡорт телмәр этикетән һаҡлау); <u>танып белеү универсаль уҡыу эшмәкәрлеге</u> (проблеманы асыҡлау, дөрөҫ аргументлай белеү, логик яҡтан төҙөк фекер йөрөтөү, иҫбатлау табыу, раҫлаусы йәки кире ҡағыусы тезис килтереү; библиографик эҙләнеүҙе тормошҡа ашырыу, төрлө сығанаҡтарҙан кәрәкле мәғлүмәттәрҙе алыу, төп һәм өҫтәмә мәғлүмәтте билдәләү, уҡыу маҡсатын асыҡлау, аралашыу маҡсатынан сығып уҡыу төрөн һайлау; мәғлүмәти-компьютер сараларын ҡулланыу; мәғлүмәтте системаға килтереү һәм киренән эшкәртеү һәм уны төрлө ысулдар менән күрһәтеү һ.б.); <u>регулятив универсаль уҡыу хәрәкәте</u> (эшмәкәрлек маҡсатын ҡуя һәм аныҡ итеп әйтә белеү, эшмәкәрлекте эҙмә-эҙлекле планлаштыра һәм кәрәк саҡта үҙгәртә белеү; үҙ контроль, үҙ баһалау, үҙ

коррекциялау һ.б. тормошҡа ашырыу). Функциональ грамоталыҡтың мөһим компоненты телмәр эшмәкәрлеге төрҙәренә нигеҙләнә һәм мәктәптә туған телде өйрәнеү аша уҡыусыларҙың фекерләү һәләтен маҡсатлы йүнәлештә үҫтереүҙе күҙ уңында тота.

Функциональ грамоталыҡты формалаштырыу, уҡыусыларҙың телмәр эшмәкәрлеген камиллаштырыу башҡорт теленең төҙөлөшө һәм аралашыуҙың төрлө шарттарында уны ҡулланыу үҙенсәлектәренән белеү нигеҙендә төҙөлә. Уҡыу процесы телде анализлау күнекмәләрен формалаштырыуға ғына йүнәлдерелгән булырға тейеш түгел, ә шулай уҡ телмәр мәҙәниәтен тәрбиәләү, тормошта мөһим күнекмәләрҙе формалаштырыу, төрлө уҡыу төрҙәрен ҡулланыу, тексты мәғлүмәти эшкәртеү, мәғлүмәтте төрлө формала эҙләү, телмәр ситуацияһына, әҙәби тел нормаларына һәм аралашыуҙың этик нормаларына яраҡлы төрлө ысулдарын файҙаланыу. Шулай итеп, төп дөйөм белем биреү мәктәптәрендә башҡорт телен уҡытыу баланың дөйөм мәҙәни кимәлен үҫтерергә, артабан уҡыуын төрлө белем биреү учреждениеларында дауам итә алырлыҡ кимәлдә булырға тейеш.

Календарь-тематик планлаштырыу

| № | Темалар | Дәрес һаны | Үткәрелеү ваҡыты | Уҡыусыларҙың эшмәкәрлеге |
|---|---|---|---|---|
| 1. | Көҙ | 1 | 02.09-09.09 | Уҡыусыларҙың йәйге тәьҫораттары менән уртаҡлашыу, уҡыу, белем, яңы уҡыу йылы тураһында әңгәмә ойоштороу.Тасуири уҡыу күнекмәләре булдырыу. Яңы һүҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү. Сағыштырыу тураһында төшөнсә биреү. Әҫәрҙәрҙә көҙгө тәбиғәттең тасуирланыуын ҡарау, уны үҙең күргәндәр менән сағыштырыу. Шиғырҙарҙы тасуири уҡыу, һүрәттәр төшөрөү. Башҡорт теленең өндәр системаһын иҫкә төшөрөү. Башҡорт теленең өндәр системаһын рус теленең өндәр системаһы менән сағыштырыу. Фонетик күнегеүҙәр эшләү.<br>Башҡорт телендәге к-г, һ-х, н-ң, с-ҫ, з-ҙ тартынҡыларының дөрөҫ әйтелешенә күнекмәләр үткәреү. Тартынҡы өндәрҙең үҙгәреше. Башҡорт теленең ҡанундарына ярашлы һөйләү күнекмәләре үткәреү. |
| 2 | Милли кейем - кешенең милли йөҙөн билдәләүсе күрһәткес | 2 | 11.09-16.09<br>18.09-23.09 | Һүрәттәргә, фотоларға ҡарап, үҙ һүҙҙәрең менән һөйләү күнекмәләре үткәреү. Синоним, антоним, омоним темаларын ҡабатлау. |
| 3 | Туған телдең ҡәҙере | 2 | 25.09-30.09<br>02.10-07.10 | Тасуири уҡыу күнекмәләре булдырыу. Туған телдең ҡәҙере, уны белеүҙең мөһимлеге тураһында әңгәмәлә ҡатнашыу. Яңы һүҙҙәрҙе, |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | | | | һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү. Сағыштырыу тураһында төшөнсә биреү. Туған телдең әһәмиәте тураһында фекер йөрөтөү, ул фекерҙе һөйләү, яҙыу. Әҫәрҙәге сағыштырыуҙарҙы таба белеү, һүҙлек байлығын арттырыу өҫтөндә ентекле эш алып барыу. |
| 4 | Йырым минең- Башҡортостан | 2 | 09.10-14.10<br>16.10-21.10 | Башҡортостан республикаһының үткәне, бөгөнгөһө, киләсәге менән танышыу. Республика тураһында тулы мәғлүмәт алыу. “Башҡортостан” темаһы буйынса тәҡдим ителгән материалдың тулы һәм тарихи яғын дөрөҫ сағылдырыуына иғтибар итеү. Үҙең йәшәгән ерҙең – Башҡортостандың- тарихы, уның байлығы, күренекле шәхестәре һ.б. хаҡындағы белемдәрҙе системаға һалыу. |
| 5 | Уралып ятҡан Уралтау | 2 | 23.10-27.10<br>07.11-11.11 | Исемдәрҙең һан, килеш менән үҙгәрешен ҡабатлау, һөйләмдә исемдәрҙең ниндәй килештә килеүен дөрөҫ билдәләү. Әҫәрҙәрҙә башҡорт халҡының үткәне, бөгөнгөһө тураһында әңгәмә ҡороу, башҡорттарҙың элекке тормошон һүрәтләү |
| 6 | Ағиҙелкәй алҡын,һыуы һалҡын | 2 | 13.11-18.11<br>20.11-25.11 | Тәбиғәтте һаҡлау мәсьәләләре тураһында фекер йөрөтә белеү, Башҡортостандағы йылғалар тураһында диалог төҙөү. Яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәрҙе ҡабатлау. |
| 7 | Ҡыш | 2 | 27.11-02.12<br>04.12-09.12 | Шиғырҙарҙа, хикәйәләрҙә ҡышҡы тәбиғәттең матурлығын тасуирлау. Тасуири уҡыу күнекмәләре үткәреү. Хикәйәләрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү, һөйләргә өйрәнеү. Образдарға характеристика биреү. Яңы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү. Шиғри телмәр һәм проза телмәрен,хикәйәләү тураһында төшөнсәне асыҡлау. Ялғауҙарҙың варианттары менән практик таныштырыу, ул варианттарҙың барлыҡҡа килеү сәбәптәрен аңлатыу, практик күнегеүҙәр башҡарыу. Рус теленән үҙләштерелгән бер төркөм һүҙҙәрҙә ялғау ҡушҡанда һүҙ аҙағындағы тартынҡы өндөң төшөп ҡалыуын, йәки һуҙынҡылар өҫтәлеүен практик үҙләштереү. Башҡорт һәм рус телдәрендәге һүҙьяһалыш юлдарын асыҡлау, уларҙың оҡшашлығы һәм айырмаһын билдәләү. Ҡушма һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышын үҙләштереү, иҫтә ҡалдырыу, нығытыу буйынса практик эштәр башҡарыу. |
| 8 | Тау башында балҡый бер | 2 | 11.12-16.12 | Өфө ҡалаһының матурлығын данлау, диалог төҙөү, тарихи |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | ҡала | | 18.12-23.12 | ҡомартҡыларҙың әһәмиәтен белеү, боронғо башҡорт ҡалалары тураһында проект эшләү. Башҡорт телендә исемдәрҙең сифат урынында килә алыуын, сифат тураһында ҡабатлау. |
| 9 | Башҡорт йолалары | 2 | 25.12-29.12<br>09.01-13.01 | Тәбиғәткә бәйле йолалар менән танышыу, йолаларҙың тәрбиәүи әһәмиәтен белеү. Алмаш темаһына күнегеүҙәр өҫтөндә эшләү |
| 10 | Башҡорт ауыҙ-тел ижады Әкиәттәр. Легендалар. Йомаҡтар. Мәҡәлдәр. | 4 | 15.01-20.01<br>22.01-27.01<br>29.01-03.02<br>05.02-10.02 | Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады төрҙәре:көләмәс, йомаҡтар, әкиәттәрҙең үҙенсәлеген белеү, әкиәттәрҙә яҡшылыҡ менән яманлыҡ сифаттарының сағылыуын таный белергә өйрәнеү, исемдәрҙе ҡабатлау, һандарҙың яһалышы, төркөмсәләрен белеү, хаталар өҫтөндә эште үҙ аллы эшләй белергә өйрәнеү. |
| 11 | Ғаиләм-ҡәлғәм | 2 | 12.02-17.02<br>19.02-24.02 | Ғаиләләге матур мөнәсәбәттәр, атай-әсәйҙең роле тураһында әңгәмә ҡороу. Бер-береңә ярҙам итеү, хөрмәтләү тураһында фекерҙәрҙе яҙыу. |
| 12 | Әсәйем – күҙ нурым | 1 | 26.02-02.03 | Әҫәрҙәр өҫтөндә тасуири,шыма уҡыу күнекмәләрен нығытыу. Әсәй тураһында әңгәмәләшеү, ижади эштәр башҡарыу. |
| 13 | Башҡорт аштары | 2 | 04.03-09.03<br>11.03-16.03 | Башҡорт аштары атамаларын белеү, милли аштарға заманса ҡараш тураһында диалог төҙөү |
| 14 | Ил һаҡлап, азатлыҡ даулап | 2 | 18.03-22.03<br>01.04-06.04 | Тарихи шәхестәр исемдәрен, тормош юлдарын һөйләй белеү,Салауат Юлаев тураһындағы әҫәрҙәрҙә батырҙың тормошо, башҡорттарҙың көнкүреше, йәшәйеше тураһында фекер йөрөтә белеү |
| 15 | Дуҫлыҡ менән көслөбөҙ | 2 | 08.04-13.04<br>15.04-20.04 | Халыҡ – ара дуҫлыҡ, туғанлыҡ сифаттарының сағылыуын күрә белеү, телмәр үҫтереү. Яҡын дуҫыңа ҡылыҡһырлама яҙыу |
| 16 | Бөйөк Еңеү | 2 | 22.04-27.04<br>02.05-11.05 | Бөйөк Ватан һуғышы, билдәле яугирҙар, һуғыш тураһында әҫәрҙәр, ветерандар тураһында әңгәмәләшеү, презентация эшләү |
| 17 | Башҡорт халҡының Кәсептәре һәм шөғөлдәре | 1 | 13.05-18.05 | Башҡорт халҡының йылҡысылыҡ, солоҡсолоҡ һөнәрҙәре тураһында әңгәмә ойоштороу, яҙма эштәр башҡарыу |
| 18 | Уҡыу-белем шишмәһе | 1 | 20.05-24.05 | Уҡыу, белем, уҡыу йылының һөҙөмтәләре тураһында әңгәмә ойоштороу, тасуири уҡыу күнекмәләре булдырыу |
| | Бөтәһе | 34 | | |

7-се класс уҡыусылары төп белем биреү курсын үҙләштергәндән һуң түбәндәге һөҙөмтәләргә ирешергә тейеш:

1. Уҡыусыларҙың башҡорт теле буйынса лексик, грамматик күнекмәләре, филологик белемдәре сиктәрендә генә ҡалмайынса, телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәрендә лә ҡулланырлыҡ кимәлдә булырға тейеш.

2.Уҡыусыларҙа башҡорт телендә һөйләгәнде, уҡығанды, радиотелетапшырыуҙар тыңлағанды аңлау күнекмәләре булдырыу (аудирование);

- башҡорт теленең орфоэпик ҡағиҙәләрен үҙләштереп, уҡылған әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһе буйынса үҙ-ара һөйләшергә, тәҡдим ителгән темалар, ситуациялар буйынса һөйләй белеү;

- һәр класс өсөн махсус төҙөлгән дәреслектәрҙәге, уҡыу һәр ҡулланмаларындағы текстарҙы башҡорт телендә сыға торған “Йәншишмә”, “Аманат”, “Шоңҡар”, “Йәшлек” гәзит-журналдарын үҙ аллы һәм аңлы уҡый белеү;

- әҫәрҙәрҙе уҡып, үҙ фекерҙәрен билдәле кимәлдә үҙ аллы яҙыу күнекмәләрен булдырыу; (инша, изложениелар яҙыу)

- башҡорт телен өйҙә, йәмғәт тормошонда, хеҙмәт процесында практик файҙаланыу;

-башҡорт халҡының тарихын, сәнғәтен, әҙәбиәтен, милли йолаларын, башҡорт халҡының күренекле шәхестәрен, уларҙың эшмәкәрлеген, ижадын белеү, йәшәгән төйәккә ихтирам һәм һөйөү менән ҡарау. Үҙенде һанап бөтөргөһөҙ бәйләнештәрҙән торған донъяның бер өлөшө итеп тойоу, кешеләрҙең тел ярҙамында бер-береһе менән бәйләнеше әҙәплелекте таныуға нигеҙләнеүен аңлау.

-аралашыуҙы йәмғиәттең, мәҙәниәттең әһәмиәтле бер өлөшө итеп таныу. Башҡорт теленең матур, яғымлы халыҡ байлығы булыуын аңлап үҙләштереү.

-хеҙмәт кешелек йәшәйешенең төп шарты булыуын ҡабул итеү.

Хеҙмәткә һөйөү тәрбиәләүҙә уҡыу эшмәкәрлегенең әһәмиәте ҙур.

-уҡыу эшмәкәрлеге барышында ойошҡанлыҡҡа, үҙаллылыҡҡа, яуаплылыҡҡа, хеҙмәтте һөйөргә өйрәнергә мөмкин икәнлеген аңлау.

- башҡорт телен һәм халҡыңды хөрмәт итеү, халыҡтың йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен өйрәнеү, ғаилә, ил алдында бәләкәйҙән үк яуаплы булыуҙы тойоп үҫеү. Үҙең һәм башҡалар өсөн яуаплылыҡ тойоп үҫеү, кешенең йәшәү урыны булған тәбиғәтте һаҡлау кәрәклеген аңлау.

Башҡорт теле нормалары -фонетика һәм орфоэпия, башҡорт әҙәби теле, һүҙ төркөмдәре, ябай һөйләм һәм ҡатмарлы һөйләм төрҙәре, синтаксисы һәм пунктуация, һүҙбәйләнеш һәм һөйләм. Һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәре. Синтаксик- стилистик күнегеүҙәрҙе башҡарыу. Фольклор әҫәрҙәренән һуң башҡорт яҙыусылары һәм шағирҙарының туған тел, тыуған ер, дуҫлыҡ, хеҙмәт, ил яҙмышы, азатлыҡ өсөн көрәш темаларына арналған иң күренекле әҫәрҙәре үҙләштереү.

Уҡыу-уҡытыу ҡулланмалар исемлеге


1. Төп дөйөм белем биреү федераль дәүләт стандарттары. – М: Просвещение, 2011
2. Ғәбитова З.М. Төп дөйөм белем биреү буйынса өлгө программалар. Башҡорт теле 5-9 класс. – Өфө: Китап, 2012
3. Аҙнағолов Р.Ғ. Башҡорт телен уҡытыу методикаһы. – Өфө: Китап, 1996
4. Аҙнағолов Р.Ғ. Мәктәптә башҡорт телен уҡытыу методикаһы. – Өфө: Китап, 2011
5. Раҡаева Ә.С., Дәүләтшина М.С. Башҡорт теленән контроль һорауҙар, тестар ҡулланмаһы.- Өфө: Педкнига, 2008
6. Баһауетдинова М.И., Йәғәфәрова Г.Н. Башҡорт теле һәм әҙәбиәт дәрестәрендә яңы технологиялар ҡулланыу. – Өфө, 2008
7. Сәмситова Л.Х. Башҡорт тел картинаһында мәҙәниәт концепттары. – Өфө – 2010


Уҡыусылар өсөн төп әҙәбиәт

Уҡыусылар өсөн өҫтәлмә әҙәбиәт


1. Аслаев Т. Х., Атнағолова С.В. Телмәр үҫтереү буйынса сюжетлы картиналар.-Өфө: Китап, 1996.
2. Башҡортса – русса һүҙлек.- Өфө: Китап, 1993.-231 бит.
3. Башҡортса – русса мәҡәлдәр һәм әйтемдәр һүҙлеге. – Өфө: Китап, 1994.
4. Башҡорт теленең фразеологик һүҙлеге.- Өфө: Китап, 2006.- 344 бит.

5.  Урыҫса- башҡортса һүҙлек.- Өфө: Китап, 2007.

6. Башҡорт теленән урта мәктәп, гимназия, махсус урта белем биреүсе уҡыу йорттары уҡыусылары өсөн күргәҙмә әсбап. – Өфө, 2005.

7.Башҡорт әҙәбиәте буйынса аудио-видеоәсбап. - Өфө: Башҡортостан Республикаһының Мәғариф  министрлығы, 2005.

8. Башҡорт теле. 5 – 6 кластар өсөн электрон дәреслек.

9. Башҡорт теле грамматикаһы таблицаларҙа. Фонетика. Морфология. - Башҡортостандың бәләкәй даһийы. Өфө : «Эдвис» уҡытыу – методика үҙәге, 2008.

10. Журналдар:  «Шоңҡар»,  «Аҡбуҙат»,  «Аманат

11. Интернет материалы.

**Корректировка бите**

| Класс | Бүлек, тема исеме | План буйынса үткәреү ваҡыты | Корректировка сәбәбе | Фактик үткәреү ваҡыты |
|---|---|---|---|---|
| | | | | |
| | | | | |
| | | | | |
| | | | | |
| | | | | |
| | | | | |
| | | | | |
| | | | | |
| | | | | |
| | | | | |
| | | | | |
| | | | | |